*Рухиәт*

# Буласаҡ журналистарға арнап

Район үҙәк китапханаһында балалар һәм үсмерҙәр аҙналығы сиктәрендә «Күңелдән күңелгә» тип исемләнгән сара үтте. Ябай булмаған был йыйынға район мәктәптәрендә матбуғатҡа иң әүҙем яҙышҡан уҡыусылар саҡырылғайны. Үҙ



уҡыусылары менән был сарала Рауил, Ишҡол, Ҡырҙас урта мәктәптәренән һәм Т. Кусимов исемендәге гимназиянан башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары Г. Ғ. Әхмәҙиева, Р. Х. Ғарипова, Л. В. Йомағужина һәм А. С. Шәрәфетдиновалар ҙа ҡатнашты.

Китапхана хеҙмәткәрҙәре Д. Ш. Әбүшахманова менән А. А. Тоҡомбәтовалар уҡыусылар өсөн туған тел, әҙәбиәт һәм мәҙәниәт өлкәләренән төрлө ҡыҙыҡлы һорауҙар әҙерләгәйне. Башҡорт яҙыусылары, шулай уҡ уларҙың әҫәрҙәрен билдәләү буйынса мауыҡтырғыс уйындар ҙа ойошторолдо. Балалар ҙа буш ҡул менән килмәгәйне. Йыйында ҡатнашыусылар Рауил урта мәктәбенән Анжела Бугрова, Иҙел Ғәлиуллин, Алина Ҡамалова, Айзилә Рәхмәтуллинаның, Ишҡол мәктәбенән Азалиә Атанғолова, Алһыу Мөхәмәтдинова, Әминә Махийәнова, Лилиана Ҡаһарманова, Нәркәс Ҡәйепова, Рәзинә Баҙарғолова менән Юлиә Ниғмәтуллиналарҙың үҙҙәре ижад иткән шиғырҙарын тыңлап киндне. Ишҡолдан 6-сы класс уҡыусыһы Нәркәс Әбүзәрова иң күп шиғыр яҙыусы булараҡ танылһа, Ҡырҙас урта мәктәбенең 9-сы класс уҡыусыһы Зәлиә Сәғәҙәтованың яҙғандары барыһын да һоҡландырҙы. Был ике уҡыусының сығыштарын китапханасылар үҙҙәренең махсус бүләктәре менән билдәләнеләр. Дәрестән тыш ваҡыттарын бушҡа сарыф итмәгән уҡыусылар өсөн шунан да ҙурыраҡ, шунан да олораҡ бүләктең булыуы мөмкинме һуң? Ошондай уҡ махсус бүләкте Рауил мәктәбенән башҡорт телендә шиғырҙар ижад итеүсе Анжела Бугрова ла алып һөйөндө. 7-се класта ғына уҡыған был ҡыҙҙың киләсәге лә өмөтлө күренә. Тырышып белем дә ала, ата-әсәһенә быны тигән ярҙамсы ла. Һәр хәлдә, уҡытыусыһы Гүзәл Ғиззәт ҡыҙы әйтеүенсә, мәктәптә үткән бөтә сараларҙың уртаһында ҡайнай Анжела. Спорт буйынса районда ал бирмәгән Рауил урта мәктәбе ошондай «телем, илем» тип йән атыусы уҡыусылары һәм уҡытыусылары менән дә хаҡлы рәүештә ғорурлана ала.

Сара аҙағында «Йәйғор» ойошмаһының иң әүҙем ағзаларының бер... хаҡлы ялдағы уҡытыусы Фәрзәнә апай Дәүләтшина үҙенең журналистика өлкәһендәге эш тәжрибәһе менән уртаҡлашты, балаларға аҡыллы кәңәштәрен биреп, Тыуған ил, тыуған төйәккә бағышлап яҙылған бер нисә мәҡәләһен уҡып ишеттерҙе.

**Зөһрә ҠАШАПОВА,**
*«Йәйғор» әҙәби ойошмаһы етәксеһе.*